**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**Муниципального общеобразовательное бюджетное учреждение средняя общеобразовательная школа д. ибраево муниципального района Зианчуринский район Республики Башкортостан**

**МОБУ СОШ д.Ибраево**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| методическим объединением учителей начальных классов | Заместитель директора по УВР | Директор |
| ________________ Ишбаева И. Я. | ________________ Ишбаев И.А. | ________________ Идрисов З.М. |
| Протокол №1 от «28» 08 2024 г. | Протокол №1 от «29» 08 2024 г. | Приказ №106 от «30» 08 2024 г. |

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

**учебным предметам «Родной язык», «Родная литература»**

для обучающихся 1-4 классов

**д. Ибраево 2024**

Икенсе класс өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте предметы буйынса төҙөлгән был эш программаһы түбәндәге документтарға нигеҙләнеп эшләнде:

-Рәсәй Федерацияһының башланғыс белем биреү буйынса өсөнсө быуын дәүләт стандарттары(2021 йыл) ;

-“Әлифба” һәм “Башҡорт теле”нән уҡыу программалары. Дөйөм белем биреү мәктәптәренең 1-4 кластары өсөн. Төҙөүселәре Сынбулатова Ф.Ш., Вәлиева Г.Ә. Өфө, Китап,2022.

- Туған тел (уҡыу программаһы). Дөйөм белем биреү мәктәптәренең 1-4 кластары өсөн. ( авторҙары Сынбулатова Ф.Ш., Дәүләтшина М.С., Мәүлийәрова Ә.Т. ), Өфө, Китап,2022

-Ибрай муниципаль бюджет урта дөйөм белем биреү учреждениеһының 2023-2024 йылға уҡыу планы.

Башланғыс мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә белем биреүҙең **төп бурыстары:**

- туған телдә камил һөйләшеү, фекереңде еткерә белеү, тел һәм телмәр күнекмәләрен тәрән үҙләштереүгә өлгәшеү;
- уҡыусыларҙың төрлө эшмәкәрлекте (уҡыу һәм белем алыу, хеҙмәт, аралашыу күнекмәләрен) үҙләштереүҙәренә ирешеү, универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәтеү;
- башҡорт халҡының рухи мираҫын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһы-ныу тәрбиәләү;
- дәреслек, өҫтәмә материал, һүҙлектәр, белешмә әҙәбиәт менән эш итеү күнекмәләрен камиллаштырыу;
- башҡорт телек башҡа фәндәр буйынса белем алыу сараһы булараҡ ҡулланырға әҙерләү;
- уҡыусыларҙың логик фекерләү һәләттәрен үҫтереү.

2-се http://hghltd.yandex.net/yandbtm?text=%D0%B1%D0%B5%D1%80%D0%B5%D0%BD%D1%81%D0%B5%20%D0%BA%D0%BB%D0%B0%D1%81%D1%82%D0%B0%20%D3%99%D0%BB%D0%B8%D1%84%D0%B1%D0%B0%20%D0%B4%D3%99%D1%80%D0%B5%D1%81%D0%B5%D0%BD%D3%99%20%D1%82%D0%B5%D0%BC%D0%B0%D1%82%D0%B8%D0%BA%20%D0%BF%D0%BB%D0%B0%D0%BD&url=http%3A%2F%2Fbl48.ucoz.ru%2Fprogramma_bashkirskij_jazyk.doc&fmode=envelope&lr=172&l10n=ru&mime=doc&sign=9b02f5576787a1823c60bd0f12e9b10e&keyno=0 - YANDEX_19 класта башҡорт телен өйрәнеү курсы тел ғилемен, телмәр эшмәкәрлеген үҙләштереүҙе артабан дауам итеү, туған тел аша донъяны танып белеү һәм социаль өлкәлә аң- белем алыу, мәҙәниәтле шәхес итеп тәрбиәләү **маҡсатын** ҡуя.

Күрһәтелгән маҡсаттарға ирешеү өсөн түбәндәге ғәмәли **мәсьәләләрҙе** хәл итергә кәрәк:

-лексика, фонетика, грамматика, синтаксис, орфография, пунктуация, телмәр үҫтереү өлкәһендәге белемдәрҙе, оҫталыҡта артабан үҫтереү, нығытыу, киңәйтеү;

- коммуникатив компетентлыҡ: грамоталы яҙыу һәм уҡыу, диалогта ҡатнашыу, монолог текстар төҙөү һәм һөйләү;
- туған телгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, уны теләп өйрәнеү.

Был программала башланғыс кластарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте фәне буйынса уҡытыу тематикаһы, уның йөкмәткеһе һәм уҡыусы үҙләштерергә тейеш булған универсаль уҡыу эш төрҙәре системаһы, метапредмет, шәхси, предмет һөҙөмтәләре бар.
Мәктәп алдында, шулай ук тел дәрестәрендә, ҡуйылған иң төп маҡсат - баланы шәхес итеп үҫтереү.
Яңы стандарттар буйынса уҡыусыларҙа лингвистик (тел), аралашыу (коммуникатив), этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ булдырыу талап ителә.
Лингвистик компетентлыҡ (уҡыусыларҙың башҡорт теленән мәғлүмәтлелеге) өндәр һәм хәрефтәрҙе, һүҙьяһалышын, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе, һүҙ төркөмдәрен, һөйләм киҫәктәрен, лексик һәм грамматик берәмектәрҙе, лингвистик анализды һ. б. үҙ эсенә ала.
Аралашыу (коммуникатив) компетентлығы - уҡығанды һәм башҡалар һөйләгәнде аңлау, хәҙерге әҙәби башҡорт теленең нормаларына эйә булыу, һүҙ байлығын, телдең грамматик яғын дөрөҫ итеп үҙләштереү, телдән һәм яҙма формала бәйләнешле телмәр күнекмәләрен булдырыу һ. б.
Этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ, йәғни телде милли-мәҙәни юҫыҡта үҙләштереү - ул уҡыусыларҙың телгә өйрәнеү барышында милли үҙенсәлектәрҙе сағылдырған текстар менән эшләүе, халҡыбыҙҙың тормош- көнкүреш, йола, ғөрөф-ғәҙәт үҙенсәлектәрен, шанлы үткәнен, әҙәп-әхлаҡ нормаларын, телмәр әҙәплелеген, һынлы сәнғәт әҫәрҙәрен, мәҙәниәтен, халыҡ ауыҙ-тел ижады үрнәктәрен белеүе, башҡорт халҡының телмәр әҙәплелеген үҙләштереүе, рухи ҡомартҡыларын ихтирам итеүе һ. б.
Программаның бурыстарын тормошҡа ашырыу өсөн заманса эш методтарын һәм алымдарын ҡулланырға кәрәк. Дәрестә уҡыусыларға төплө белем нигеҙҙәре, ныҡлы күнекмәләр биреү менән бергә, уларҙың танып белеү эшмәкәрле- ген һәм фекерләүен үҫтереүсе, дөйөм үҫешен тәьмин итеүсе алымдар һәм саралар менән файҙаланыу мотлаҡ талап булып тора. Уҡыусылар грамматик ҡағиҙәләрҙе практик эш нигеҙендә аңлап, әүҙем үҙләштерергә, алған белемдәрен аңлата, нигеҙләй, иҫбатлай, ҡуллана белергә тейеш. Уҡыусыларға проект төҙөү методын ҡулланыу ҙа тәҡдим ителә.
Уңышҡа ирешеү өсөн тел дәрестәрен уҡыу дәрестәре менән тығыҙ бәйләп алып барыла.
**Программа түбәндәге принциптарға таянып төҙөлдө:**
1) һәр баланың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу;
2) фәннилек һәм системалылыҡ принциптары;
3) уҡыусыларҙы төрлө яҡлап өҙлөкһөҙ үҫтереү;
4) баланың психик һәм физик һаулығын һаҡлау.
Программаның нигеҙендә коммуникативлыҡ принцибы ята.
**Уҡыу предметына дөйөм характеристика**
Башҡорт теле һәм әҙәбиәте курсында предмет ярҙамында түбәндәге үҫеш юлдары тормошҡа ашырыла:
предмет кимәлендә белемгә эйә булыу;
уҡыу техникаһын үҫтереү, текстарҙы анализлау юлдарына эйә булыу;
яҙма һәм һөйләү телмәренә эйә булыу;
тел тураһында бел ем алыу һәм системалаштырыу;
орфография һәм пунктуацияны өйрәнеү;

башҡорт теленең тәрбиәүи потенциалын ҡулланыу;
телде тойомлауҙы үҫтереү.

**Предметтың укыу планындағы урыны**

Ибрай муниципаль бюджет урта дөйөм белем биреү учреждениеһының 2023-2024 йылға укыу планына ярашлы “Башҡорт теле һәм әҙәбиәте” предметын укытыуға азнаһына 4 сәғәт дәрес бирелә. “Башҡорт теле һәм әҙәбиәте” предметтары айырым укытыла.Азнаға ике сәғәт- башҡорт теле, йылға - 68 сәғәт,азнаға ике сәғәт- башҡорт әҙәбиәте, йылға 68 сәғәт.

**Башҡорт теленән программа йөкмәткеһе**

***Графика.*** Хәреф һәм өн. Я, е,ё, ю хәрефле һүҙҙәр. һүҙҙең өн моделе менән тамғаланышы. Уларҙың хәреф менән яҙылышы.
График тамғалар: һүҙҙәр араһында ара ҡалдырыу, юлдан юлға күсереү тамғаһы, ҡыҙыл юл, абзац.
***Морфология.*** Һүҙ төркөмдәре. Предмет атамаһы. Кем? Һәм нимә?
һорауына яуап булыусы һүҙҙәр. уның мәғәнәһе, телмәрҙә ҡулланылышы. Кешенең исем-фамилияһын; хайуандарҙың ҡушаматтарын: ер- һыу атамаларын белдереүсе һүҙҙәр.
Предмет хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Уларҙың мәғәнәһе. Ни эшләй? (бөгөн, хәҙер, ошо мәл, ни эшләне кисә, ни эшләр ни эшләйәсәк? (иртәгә, киләсәктә) һорауҙарына яуап биреүсе һүҙҙәр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.
Предмет билдәһен белдергән һүҙҙәр. Уларҙың мәғәнәһе. Ниндәй? һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр.
Ярҙамсы һүҙҙәр: һәм, менән; -да, -дә, -ҙа, -ҙә, -та, -тә, -ла, -лә; -ғына, -генә, -ҡына, -кенә. Уларҙың айырым торғанда мәғәнә аңлатмауы. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең телмәрҙә ҡулланылышы.
***Һүҙьяһалыш.*** Тамырҙаш һүҙҙәрҙе укыу, яҙыу ( «тамыр», «ялғау» төшөнсәһе (термины) бирелмәй).
***Синтаксис.*** Һөйләм, һүҙбәйләнеш, һүҙ (уларҙың оҡшашлығы, айырмаһы). Һөйләмде әйтеү маҡсаты. Һөйләмдә интонация. Хәбәр һөйләм. Һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә, хәбәр. Эйәрсән киҫәктәр.
***Орфография һәм пунктуация.*** Дөрөҫ яҙылыш ҡағиҙәләрен өйрәнеү һәм ғәмәли ҡулланыу. Ҙур хәреф. Һөйләм башы. Кеше исем-шәрифтәре. Хайуан ҡушаматтары. Ер-һыу атамалары. Ике кешенең һөйләшеүен диалог формаһында яҙыу. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләре. Һөйләмдә һаналып киткән һүҙҙәр араһында тыныш билдәләре. У-ү, о-ө, э,ы хәрефле һүҙҙәр. Йә, йө, йү, йе һәм йо, йы ҡушымсалы һүҙҙәр. Ике өндө белдергән хәрефле (я, е, ё, ю) һүҙҙәр. Һүҙ башында (уы), (уэ) өндәре (в хәрефе).
***Телмәр үҫтереү.*** Аралашыу ситуацияһы. Уға ярашлы һөйләшеү ҡороу. Текст. Тексты таныу. Тексты исеме, уның һөйләмдәренең мәғәнәүи бәйләнеше. Текст абзацтары һәм уларҙың мәғәнәүи эҙмә- эҙлелеге. Текст төҙөү. Диалог (әңгәмә, бәхәс). Монолог (үҙ аллы һөйләнеү, сығыш яһау, иғлан эшләү, доклад). Аралашыу этикеты (сәләм биреү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, рәхмәт белдереү, үтенес менән өндәшеү).
***Универсаль укыу эш төрҙәренә өйрәнеү.*** Үҙ аллы белем алыу оҫталығына өйрәнеү. Уҡыу эшмәкәрлеге (маҡсатты күҙаллау, укыу материалына ҡыҙыҡһыныу, эште планлаштырыу, уҡыу мәсьәләһе, эҙләнеү эше, рефлексия, контроль). Уҡыу диалогы. Аралашыу мәҙәниәте.

**Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр**

Әсә теле программаһын өйрәнеү процесында уҡыусы өйрәнергә тейеш:
Шәхси сифаттарҙы үҫтерергә:
-үҙ аллы эш итергә, белем алыу процесында етди һәм яуаплы ҡарарға;
- атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға;
- мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булырға;
- тыуған илде яратырға, ерҙе, телде яратырға;
- һаулыҡ нығытырға.
Предмет буйынса белем алырға:
- һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса төркөмләргә. Улаға тейешле һорау ҡуйырға. Предмет атамаһын, хәрәкәтен, билдәһен белдереүсе һәм ярҙамсы һүҙҙәр тураһында һөйләргә һәм яҙма телмәрҙә урынлы ҡулланырға;
- һүҙҙең өн- моделен төҙөргә һәм уны хәреф менән яҙырға;
- һөйләмдәр төҙөргә, уларҙы тейешле һүҙ өҫтәп тулыландырырға;
- һөйләмдәрҙе әйтелеү маҡсатына ҡарап хәбәр, өндәү, һорау һөйләмдәргә айырырға. Уларҙы тейешле интонация менән уҡырға;
- һөйләмдең эйәһен, хәбәрен айыра белергә;
- башҡорт теленең дөрөҫ яҙылыш ҡанундарын, ҡағиҙәләрен үҙләштерергә: у-ү, о-ө, э(е), ы хәрефле һүҙҙәр, һүҙҙә йә, йө, йү, йе (һүҙ уртаһы), йо, йы ҡушымсалары, һүҙ башында я, е, ё, ю хәрефтәре, һүҙ башында в хәрефе, ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым яҙылышын белергә. Һөйләм аҙағанда дөрөҫ тыныш билдәһе ҡуйырға. Кеше исемен, фамилияһын, ер-һыу атамаһын, хайуан ҡушаматтарын ҙур хәреф менән яҙырға;
- 8-10 һөйләмдән торған тексты күсереп яҙырға;
- 30-35 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙырға; һүҙҙе ижеккә бүлергә, уны юлдан юлға күсерә белергә;
- тексы аңлы уҡырға һәм уның йөкмәткеһе менән бәйләнгән эштәрҙе эҙмә-эҙлекте үтәргә. Уның нигеҙендә ҡоролған һөйләшеү йәки тикшереү эштәрен үтәргә;
- уҡыу ситуацияһына ярашлы диалогта ҡатнашырға.
Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштерергә:
- үҙ аллы уҡыу, мәғлүмәтле булыу оҫталығын камиллаштырырға: белем, мәғлүмәтте эҙләү күнекмәләре булдырырға; тикшеренеү-эҙләнеү эшен планлаштырырға; парлап, төркөмләп, команда менән эшләргә;
- алған мәғлүмәтте ҡағыҙға теркәргә;
- билдәләмә, ҡағиҙә, алгоритм, һығымта, график схема, модель, таблица ярҙамында теркәргә;
- диалог ҡорорға, уҡыу материалын тикшерергә, анализларға, һығымта яһарға;
- мәҙәниле аралашыу этикетына өйрәнергә: әңгәмәсене тыңлай, хуплай белергә, аңламағанынды итәғәтле итеп һорашырға, яуап алырға һәм рәхмәтеңде белдерергә; үҙ фекереңде ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп еткерергә, уны яҡлай белергә.

**2-се класта башҡорт әҙәбиәтенән программа йөкмәткеһе**
Белем байрамы.

Күҙгө тәбиғәт, сентябрь башын һүрәтләү. Уҡыуҙың тәүге көнө, 1 сентябрь – Белем байрамы тураһында һөйләшеү. Уҡытыусыға, мәктәпкә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү. Тырышып белем алыу – төп маҡсат икәнен иҫкә төшөрөү.
Халыҡ ижады менән танышыу.
Уҡыйбыҙ ҙа, уйнайбыҙ ҙа...
Бишек йырҙары. Йәнлектәрҙең бишек йырҙары.
Бармаҡтар менән уйындар. Мөғжизәле бармаҡтар.
Һамаҡтар.
Йомро-йомро йомғағым, йомғағымда – йомағым.
Мәҡәлдәр – ололар һүҙе, ата – балалар кәңәше, өгөт – нәсихәте, аҡһаҡалдар васыяты.Фәстереүҙәр (уйҙырма).
Уйындар. Шаярыуҙар.
Башҡорт халҡының ауыҙ – тел ижады ҡомартҡылар менән таныштырыу. Улар нигеҙендә етеҙ һәм аңлы уҡыу оҫталығын шымартыу. Һөйләмдәрҙе һәм тексты, таныш билдәләре ҡуйылған пауза яһап, тейешле интонация менән уҡыу. Шыбырлап , эстән уҡыуға күнегеү.
Әкиәттәр донъяһында

Әкиәтте һөйләү, уҡыу, тыңлау нескәлектәре менән танышыу. Уҡыу техникаһын камиллаштырыу. Хәл – ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле тасуирлап , ике – өс әкиәтте матур итеп һөйләргә өйрәнеү. Әкиәттән өҙөктәрҙе роллә уҡыу, сәхнәләштереү, йәғни тасуири уҡыу.
Шиғыр уҡыу, яттан һөйләү

Шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәнеү, яттан һөйләү.

Уҡыусыларҙы шиғри телмәр үҙенсәлектәре менән таныштырыу. Шиғри әҫәрҙең ҡыҫҡа юлдар менән бирелешен һәм ритм, рифма, баҫым күренештәрен күҙәтеү.
Тәбиғәт күренештәре, тәбиғәт матурлығы.
Экологик мәсьәләләр.
Беҙ - тәбиғәт балалары.
Тәбиғәтте өйрәнәйек, уны һаҡлайыҡ

Етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен камиллаштырыу. Тәбиғәт тураһындағы әҫәрҙәрҙе тәьҫирләнеп уҡыу. Уҡыған буйынса фекер алышыу, уҡығанды тасуирлап һөйләү.

Тәбиғәт тураһындағы әҫәрҙәрҙә уҡыусыларҙың тирә-яҡ мөхит, тормош хаҡындағы белемдәрен киңәйтеү. Тәбиғәт миҙгелен һүрәтләгән әҫәрҙәрҙә тәбиғәт күренештәренең нескәлектәрен иғтибар итеү, матурлығын тоя белеү, һоҡланыу һәм тәбиғәттән алған уй-фекерҙәрҙе белгертеү, хис – тойғоларҙы тасуирлап һөйләү күнекмәләрен биреү.
Аралашыу мәҙәниәте. Кешеләр нисек аралаша?
Әҙәп төбө – ғәҙәт

Уҡылған әҫәрҙә балалар, өлкәндәр араһында булған хәл-ваҡиға, улар эшләгән эштәр, геройҙарҙың холоҡ-фиғеле, ҡылыҡтарын тураһында уйландырыу, фекер алышыу һәм баһа биреү.

Әҫәрҙәрҙәге балалар араһындағы мөнәсәбәткә күҙәтеү яһау. Ыңғай геройҙар өлгөһөндә мәҙәни аралашыу ҡағиҙәләрен үҙләштереү һәм ғәҙәти етешһеҙлектәр, насар күренештәргә ҡарата ҡарашыңда белдереү, баһа биреү, уларҙы булдырмау йәки бөтөрөү өсөн ниндәй саралар күреү тураһында уйланыу.

Беҙ хеҙмәтте, тыуған ерҙе һөйәбеҙ...

Уҡыу дәрестәрендә хеҙмәт тәрбиәһе, тыуған ил һәм тыуған төйәк , ата-бабалар ере тигән тәрән мәғәнәгә эйә булған төшөнсәләр биреү әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Бирелгән әҫәрҙәрҙә тыуған ергә , йәшәгән төйәккә, тирә-яҡ мөхиткә ҡарата кеше мөнәсәбәте мәсьәләләре күтәреләю . Бала дәрестә уҡыған шиғыр, әкиәт, хикәйә һәм башҡа жанрҙар аша кешенең тыуған еренә булған мөхәбәтте тырыш хеҙмәте һәм файҙалы эштәре менән билдәләүенә инана.

**Кластан тыш уҡыу**

Тыуған төйәк, ер – һыу, республикабыҙ. Ҡош – ҡорт, хайуандар, үҫемлектәр, уларҙы ҡайғыртыу һәм кешеләрҙең, шулай уҡ балаларҙың, уларға мөнәсәбәте. Балалар һәм өлкәндәр , бала һәм уның тиҫтерҙәре. Улар араһындағы мөнәсәбәт.

*Ҡушымта* **Башҡорт теленән календарь -тематик план**

| Дәрес | Дата | | Дәрестең темаһы | Йөкмәткеһе | Планлаштырылған һөҙөмтә |
|---|---|---|---|---|---|
| | план | факт | | | |
| 1 | 2.09 | | Уҡымышлы булыу ни өсөн кәрәк? | Мәктәптә белем алыу, уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнеү. Мотив тыуҙырыу. | 2-се класта уҡыу осорона пландар ҡабул итергә, маҡсатлы йүнәлеш алырға. Уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнергә. |
| 2 | 04.09 | | Баш хәреф. һөйләм. | Һөйләм башы һәм аҙағы. Уны тейешле интонация менән уҡыу. | Һөйләмде тейешле интонация менән уҡырға. Уның башында ҙур хәреф, аҙағына тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙырға. Күсереп яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә. |
| 3 | 9.09 | | Һөйләм | Һөйләмде әйтеп яҙҙырыу , күсереп яҙыу.. | Кеше исемдәренең мәғәнәһә тураһында мәғлүмәт алыу өсөн төрлө сығанаҡтар ҡулланырҡа. Кеше исемдәрен дөрөҫ яҙырға. |
| 4 | 11.09 | | Һөйләм.Һүҙбәйләнеш. | Шиғырҙы күсереп яҙыу. Шиғыр | Кеше исем-фамилияларын дөрөҫ яҙырға. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | строфаһының һәр юлы ҙур хәрефтән яҙылыуы | һөйләмдә орфограммалар аҫтына һыҙырға. Уларҙы аңлатырға. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға |
| 5 | 16.09 | | Баш хәреф. Кеше исемдәре. | Кеше исемдәре, уларҙың мәғәнәһе, яҙылышы. | Тыуып үҫкән ер-һыу атамалары тураһында мәғлүмәт алырға. Ауыл, ҡала, йылға, күл, тау атамаларын ҙур хәрефтән яҙырға.<br>Ҡушамат хайуанға нимәгә нигеҙләнеп ҡушылыуын аңлатырға. Уларҙы ҙур хәрефтән яҙырға. |
| 6 | 18.09 | | Кеше исемдәре. | Әйтелгәнсә яҙылмай торған исемдәр: (элэйә)- Әлиә.Күсереп яҙыу. | Һөйләмде дөрөҫ яҙырға. Уҡытыусы укыуы аҫтында текст яҙырға. Һөйләмдең баш киҫәктәрен, эйәрсән киҫәктәрен тамғалай белергә Һүҙҙәрҙең өн моделен дөрөҫ төҙөргә, транскрипцияла яҙырға, орфограммаларҙың аҫтына һыҙырға, аңлата белергә |
| 7 | 23.09 | | Кеше исемдәре,фамилиялары | Кеше исем-фамилияларын дорос языу. | Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе ҙур хәрефтән яҙырға. Һөйләм, тексты дөрөҫ күсереп яҙырға. Диктант тексын иғтибарлы тыңларға. яҙырға. |
| 8 | 25.09 | | .Кеше фамилиялары. | Кеше фамилиялары. Әйтелгәнсә яҙылмай торған фамилиялар.(-ыф), (эф) өндәренә бөткән ир-ат | Үҙ-ара аралашыу оҫталығына өйрәнергә. Кеше менән танышҡанда мотлаҡ әйтелә торған һүҙҙәрҙе яғымлы итеп әйтергә, аралашыу |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | фамилияһының аҙағында -ов,<br>-ев хәрефтәре яҙылыуы:(Кәримыф)-(Кәримов) Күсереп яҙыу. | мәҙәниәтенә өйрәнергә. |
| 9 | 30.09 | | Кеше фамилиялары. | .Үҙеңден,класташтарыңдын,күршеләреңден фамилияларын дөрөҫ яҙыу. | Үҙ-ара аралашыу оҫталығына өйрәнергә.<br>Кеше менән танышҡанда мотлаҡ әйтелә торған һүҙҙәрҙе яғымлы итеп әйтергә, аралашыу мәҙәниәтенә өйрәнергә. |
| 10 | 02.10 | | Ер-һыу атамалары.. | . Ер-һыу атамаларын аңлатҡан, ер-һыу атамаларын ҙур хәреф менән яҙылышы. | Таныш булмаған кешегә тәү башлап һүҙ ҡушырға, аралашырға күнегергә. |
| 11 | 7.10 | | Ер-һыу атамалары | Тыуған ауыл, ҡала янындағы йылға, күл, тау атамалары. Күсереп яҙыу | Яҡын кешеләрҙең тыуған көндәрен ҡағыҙға теркәп ҡуйырға, ул көндө уларҙы ҡотларға. Өндәшеү маҡсатына, урынына ҡарап тауышты тейешлесә көйләргә өйрәнергә |
| 12 | 9.10 | | Хайуан ҡушаматтары. | . Хайуан ҡушаматтарының ҙур хәреф менән яҙылышы.Йорттағы хайуандарҙың ҡушаматтарын яҙыу | Йәмғиәт урындарында ашығыс белешмә кәрәк булғанда фекереңде ҡыҫҡа итеп аңлата белергә. |
| 13 | 14.10 | | Хайуан ҡушаматтары. | . | . |
| 14 | 16.10 | | Хайуан ҡушаматтары. | Иғлан, белдереү тексы төҙөү, уны матбуғат биттәрендә баҫтырырға әҙерләү. | Иғлан, белдереү йөкмәткеһен ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп төҙөргә, уны матбуғат биттәрендә баҫтырыуҙы планлаштырырға |
| 15 | 21.10 | | Тикшереү эше.<br>Диктант. Бәйге. | | Актуаль темаларға ике кеше араһында һөйләшеү өлгөһө ижад итергә. Уны дәфтәргә тейешле ҡағиҙәләргә ярашлы итеп яҙырға. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 16 | 23.10 | | Үҙ-ара һөйләшеү.Диалог. | Һөйләмдең фекерҙе белдереүе. Һөйләм башы, аҙағы. Хәрәкәтте белдергән һүҙҙеңһөйләмдең иң аҙағында килеүе. Үҙ-ара аралашыу. Теге йәки был күренеш тураһында уй-тойғолар менән бүлешеү. Кеше менән танышыу(диалог ҡороу). | Һөйләмде тейешле интонация менән уҡырға, уның мәғәнәһенә төшөнөргә. Һөйләм төҙөргә.Уны ҙур хәрефтән башларға, аҙағында тейешле ты<br>ныш билдәһе ҡуйырға |
| 17 | 06.11 | | Үҙ-ара һөйләшеү.Диалог. | . Аралашыу, диалог ҡороу оҫталығы.Диалогты дәфтәрҙә грамоталы яҙыу. Үҙ-ара аралашыу. Теге йәки был күренеш тураһында уй-тойғолар менән бүлешеү. Кеше менән танышыу(диалог ҡороу). Танышҡан кешеңде һүрәтләп һөйләү | Диалогта һәр ҡатнашыусының һүҙен дөрөҫ яҙыу. |
| 18 | 11.11 | | Йәмғиәт урындарында осрашыу,диалог. | Йәмғиәт урынында диалог ҡороу. Диалогты дәфтәргә яҙыу тәртибе | Һүрәткә ярашлы бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, сюжет йөкмәткеһен бирергә |
| 19 | 13.11 | | Йәмғиәт урындарында осрашыу,диалог.<br>Яҡын кешеләрҙе ҡотлау. | . Яҡын кешеләрҙе ҡотлау(диалог).Ҡотлау барышындағы һөйләшеү(диалогты) дәфтәргә теркәү. Аралашыу этикеты. Үҙ-ара һөйләшеү мәҙәниәте. Диалогты дәфтәргә яҙыу. | Хәбәр һөйләм аҙағында нөктә ҡуйырға. Уны дөрөҫ күсереп яҙырға. |
| 20 | 18.11 | | Әкиәт геройҙары,минең тиҫтерҙәрем,аралашыу этикеты. | Диалогты тейешле тәртиптә дәфтәргә яҙыу | Өндәү һөйләмде тейешле интонация менән уҡырға.Хәбәр һөйләм аҙағына нөктә, өндәү һөйләм аҙағына өндәү тамғаһы ҡуя белергә. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 21 | 20.11 | | Мәғлүмәт,белешмә эҙләү | | |
| 22 | 25.11 | | Һамаҡ,әйтеш,һанашмаҡ | Һамаҡ, һынамыш, мәҡәл-әйтемдәрҙе яттан белергә.Телмәр ситуацияларында мәҡәл-әйтемдәрҙе урынлы ҡуллана белергә. Тексты күсереп яҙыу | . |
| 23 | 27.11 | | Һынамыш,һанашмаҡ | | Һөйләмде дөрөҫ яҙырға ҡағиҙәләренә ярашлы күсереп яҙырға. |
| 24 | 02.12 | | Мәҡәлдәр,әйтемдәр | Саф башҡорт һүҙҙәренисек әйтелә,шулай яҙыла: туп, имән...Һүҙҙе ижеккә бүлеү. | 4-5, 5-6хәрефтән торған һүҙҙәрҙеәйтеп яҙырға. Һүҙҙеюлдан юлға күсереү өсөн ижеккә дөрөҫ бүлеү |
| 25 | 04.12 | | Иғлан,белдереү | Диктант яҙырғы өйрәнеү.Ә, ө, ү,е,э,и һәм а, о, у,ы хәрефле һүҙҙәр.Һүҙҙең тәүге ижеге ҡалын булһа, башҡа ижектәре лә ҡалын, нәҙек булһа, башҡа ижектәре лә нәҙек. | Һүҙҙәрҙе күҙәтергә, сағыштырырға.Ҡағиҙә төҙөргә. |
| 26 | 09.12 | | . Тикшереү эше | Һүрәт йөкмәткеһен эҙмә- эҙлекле бәйән итеү. Яҙма телмәр. | Һүрәт буйынса ҡулланыу өсөн бирелгән һүҙҙәр менән хикәйә төҙөргә. |
| 27-28 | 11.12 16.12 | | Һөйләм | Ижеккә бүлеү. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү. | Һүҙҙе ижеккә бүлеү ысулдарын үҙләштерергә. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү оҫталығы булдырырға |
| 29-30 | 18.12 23.12 | | Һөйләмдең баш киҫәктәре,эйә,хәбәр. | . Һөйләмдең эйәһе, хәбәре. Уларҙың һөйләмдәге функцияһы | У-ү хәрефле һүҙҙәрҙе күҙәтергә, сағыштырырға, дөрөҫ яҙырға. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 31 | 25.12 | | Һөйләмдә тыныш билдәләре | Һөйләм төҙөү. Унын аҙағында тыныш билдәләре. Һөйләмдең баш киҫәктәрен айырыу. Текст күсереп яҙыу. | Инша Инша яҙырға өйрәнергә. Һүрәтте өйрәнеү. һүҙлек эше. Һүрәт йөкмәткеһе буйынса һөйләшеү. План төҙөү. Яҙыу. яҙырға өйрәнергә. |
| 32 | 13.01 | | . Изложение. "Торналы күл ". | . Текст. Сюжет йөкмәткеһе.Идея-тематикаһы.План төҙөү. | Тексты аңлап укырға, төп фекерҙе билдәләргә. Текстың йөкмәткеһен эҙмә- эҙлекле һөйләргә, план төҙөргә, дәфтәргә яҙырға |
| 33-34 | 15.01<br>20.01 | | Хәбәр һөйләм | Хәбәр һөйләм. Һөйләмдә кем йәки нимә тураһында хәбәр ителеүе | . Һөйләмдән баш киҫәктәрҙе табырға, аҫтарына һыҙырға |
| 35-36 | 22.01<br>27.01 | | . Өндәү һөйләм | Өндәү һөйләм. Кешегә сәләм мәҙәниәте биргән, һөйөнөс.. белдергән һөйләмдәр аҙағында өндәү билдәһе ҡуйылыуы Кәрәкле белешмә алыу маҡсатында кешегә өндәшеү. Телефон аша аралашыу. | |
| 37-38 | 29.01<br>03.02 | | . Һорау һөйләм | Һорау һөйләм.Нимәлер хаҡында мәғлүмәт алыу маҡсатында өндәшеү, аҙағында һорау билдәһе ҡуйыу. Текст ике һәм унан күберәк һөйләмдәрҙән тора.Текста һөйләмдәр мәғәнәһе буйынса бер-береһенә бәйле булыуы. Ҡыҙыл юл. | . Һорау һөйләмде тейешле интонация менән уҡырға, һорау бирергә. Текст йөкмәткеһе буйынса 2-3,3-4һөйләмдән торған текст төҙөй белергә. Тексты күсереп яҙыу ҡағиҙәләренә ярашлы күсереп яҙырға һорауҙар төҙөргә |
| 39-40 | 05.02<br>10.02 | | Текст.Һорау,өндәү, хәбәрһөйләмдәр. | | .<br>Бәйләнешле телмәр үҫтерергә Эште грамотлы яҙырға. Таҙа яҙырға. |
| 41 | 12.02 | | Тикшереү эше. | Йә, йө, йү, йе(һүҙ уртаһы), йо, йы | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | ҡушымсалы һүҙҙәр. Текст. Сюжет йөкмәткеhе.Идея-тематикаhы.План төҙөү | |
| 42 | 17.02 | | Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы | Башкорт теленең төп кағиҙәhе | Һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә |
| 43-44 | 19.02<br>24.02 | | . Ҡалын һәм нәҙек әйтелешле hүҙҙәр | .Ҡалынһәм нәҙек hүҙгә ялғау ҡушыу | Башкорт теленең төп ҡағиҙәhе |
| 45 | 26.02 | | Инша.Елдерәләр саналар | Һүрәт буйынса инша яҙыу. Сюжет йөкмәткеhе. Уны эҙмә-эҙлекле тас | Тексты аңларға, төп фекерҙе билдәләргә. Текстың йөкмәткеhен эҙмә- эҙлекле hөйләргә, план төҙөргә, дәфтәргә яҙырға hүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. |
| 46-47 | 03.03<br>05.03 | | Һүҙҙе юлдан юлға күсереү | | |
| 48 | 10.03 | | Уу-Үү хәрефтәре | У,үхәрефенә бөткән hүҙҙәргә ялғау кушыу | У-ү хәрефле hүҙҙәр, уларҙың өн моделе. Һүҙҙе ижеккә бүлеү, уны юлдан юлға күсереү hүҙҙәрҙә |
| 49 | 12.03 | | Инша.Шарлауыҡ янында | Дөрөҫ итеп текст төҙөү | Дәреслектә бирелгән hүҙҙәр,hорауҙар ярҙамында текст төҙөү,яҙыу |
| 50 | 17.03 | | . Оо- Өө хәрефле hүҙҙәр | О-ө хәрефле hүҙҙәр. Уларҙың әйтелеше, яҙылышы | О-ө хәрефле hүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға |
| 51 | 31.03 | | Ээ өн-хәрефе | . Ээ хәрефе hүҙ башында. Ээ хәрефле hүҙҙәр. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү. Күсереп яҙыу. | Ээ хәрефле hүҙҙәрҙе күҙәтергә, сағыштырырға, hығымта яhарға. Ээ хәрефле hүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 52 | 02.04 | 1 | Ыы хәрефле һүҙҙәр | Ыы хәрефе һүҙ башында, уртаһында, аҙағында Һөйләмдә бер үк һорауға яуап биргән хәрәкәт һүҙҙәр | Һүҙ байлығын арттырырға. Ыы хәрефле һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға |
| 53-54 | 07.04<br>09.04 | | Ике өндө белдергән хәрефтәр | ЕеЮю Яя Ёё хәрефе һүҙ башында, уртаһында, аҙағында. Яя ЕеЮюЁё хәрефле һүҙҙәрҙең өн моделе, транскрипцияла яҙылышы , һүҙҙәр дөрөҫ яҙылышы.. | . Уларға һорау ҡуйырға Һүҙҙең өн моделен төҙөргә. Уны күҙәтергә, һығымта яһарға,(э) өнө һүҙ уртаһында һәм аҙағында килгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. |
| 55 | 14.04 | | Вв хәрефе | В хәрефе рус һәм башҡорт һүҙҙәрендә | В хәрефе уы-уе өндәре |
| 56 | 16.04 | | Иҫкәрмәле диктант | Хәрефтәрҙең дөрөҫ яҙылышы | |
| 57-58 | 21.04<br>23.04 | | Предмет атамаһын белдергән һүҙҙәр | . Предметтың атамаһын, хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Һүҙбәйләнеш. Һөйләм. Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. | Предметтарҙы күҙәтергә, тасуирлап һөйләргә. Предмет атамаһын белдергән һүҙҙәрҙе һөйләм схемаһында тейешле тамғалар менән билдәләргә |
| 59-60 | 28.04<br>30.04 | | .Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр | Предмет хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Ни эшләй? һорауына яуап булыусы һүҙҙәр. Һөйләмдең мәғәнәһен белдереүсе төп һүҙҙәр-эйә һәм хәбәр белдермәүе.Ярҙамсы һүҙҙәрҙең һөйләмдәге функцияһы. Һәм, менән ярҙамсы һүҙҙәре. Ла-лә, да-дә, та-тә, ғына-генә, ҡына-кенә | Предметтың башҡарған эшен атарға. Предмет хәрәкәтен белдергән һүҙгә һорау ҡуя белергә. Предмет атамаһына ярашлы уның хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр уйлап әйтергә, яҙырға |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | ярҙамсы һүҙҙәре. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы. Һөйләмдә бер үк һорауға яуап биреүсе предмет билдәһен һәм хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Һөйләмдең эйәһе, хәбәре, эйәрсән киҫәктәре | |
| 61-62 | 05.05 | | . Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр | Предмет билдәһен белдергән һүҙҙәр.Ниндәй? һорауына яуап булыусы предмет билдәһен белдергән һүҙҙәр. Нисек? һорауына яуап булыусы хәрәкәт билдәһен белдергән һүҙҙәр. | Предметка ярашлы билдәне атарға. Һүҙбәйләнеш төҙөп яҙырға. Һөйләмдә билдә-һүҙҙәрҙе айырырға |
| 63 | 7.05 | | Тикшереү эше | Предметты,уның билдәһен,хәрәкәтен белдергән һүҙҙәрҙең яҙылышына иғтибар итеү | |
| 64-65 | 12.05 | | Һөйләмдең тиң киҫәктәре | | |
| 66 | 14.05 | | Ярҙамсы һүҙҙәр | | |
| 67 | 19.05 | | Йомғаклау дәресе | Йыл буйына үтелгәндәрҙе йомғаклау | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 68 | 21.05 | | Тикшереү эше | | |

**Ҡушымта**

**Башҡорт әҙәбиәтенән календарь -тематик план**

| Дәрес һаны | Сәғәт һаны | дата | | Дәрес темаһы | Планлаштырылған һөҙөмтә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | план | факт | | |
| 1 | 1 | 2.09 | | Инеш.Һаумы мәктәп | Йыл аҙағында 2-се класс уҡыусылары түбәндәге телмәр күнекмәләренә эйә булырға тейеш:<br>- Уҡытыусының һөйләгәнен йәки укығанын аңлай алыу:<br>- тексты тыңлау һәм йөкмәткеһен һөйләү, йөкмәтке буйынса рәсем яһау;<br>- текст буйынса иптәштәренә йәки укытыусыға һорау биреү;<br>- 10-12 шиғырҙы яттан белеү.<br>Уҡыған текстар буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә бәләкәй хикәйә төҙөү һәм һөйләү:<br>- ишеткәндәр, башҡарған эштәр тураһында һөйләү; |
| 2 | 1 | 4.09 | | Ф.Иҫәнғолов.Баҫҡыс. | |
| 3 | 1 | 9.09 | | З.Кускилдина Ҡанатһыҙ турғай. | |
| 4 | 1 | 11.09 | | Ш.Биҡҡолдов Кешегә кәрәк белем | |
| 5 | 1 | 16.09 | | Бишек йырҙары | |
| 6 | 1 | 18.09 | | Әшкәк-бешкәк,йәки беҙҙең уйыныбыҙ. | |
| 7 | 1 | 23.09 | | Мөғжизәле бармаҡтар | |
| 8 | 1 | 25.09 | | | |
| 9 | 1 | 30.09 | | Таҡмаҡтар,фәстереүҙәр. | |
| 10 | 1 | 2.10 | | Йомғаҡлау.Кластан тыш укыу.Уйҙырмалар | |
| 11 | 1 | 7.10 | | Бнҙ әкиәт тыңлайбыҙ.Әйҙә әкиәт һөйләшәбеҙ | |
| 12 | 1 | 9.10 | | Башкорт халык әкиәте.Төлкө менән әтәс | |
| 13 | 1 | 14.10 | | Төлкө менән әтәс | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 14 | 1 | 16.10 | | М.Ғабдрахманов.Айыухас менән Айыукәс. | - картиналар, экскурсиялар, фильмдар, иллюстрациялар буйынса бирелгән ситуацияға ярашлы һөйләү;<br>- текстың йөкмәткеһен тулыһынса һәм ҡыҫҡартып һөйләү;<br>- ваҡиға, персонажға үҙ мөнәсәбәтеңде әйтә белеү;<br>- башҡорт теленән рус теленә тәржемә итә белеү.<br>Тексты талғын, шыма, һүҙәрҙе тотош (ижектәргә бүлмәй) уҡыу:<br>- поэтик әҫәрҙәрҙе тейешле интонация менән уҡый белеү;<br>- эстән һәм ҡысҡырып, ролләп һәм һайлап уҡыу;<br>- текстың темаһын, төп фекерен билдәләй алыу;<br>- текстан һорауһарға яуап табыу;<br>- картиналар ҡарау, уға исем биреү.<br>Кластан тыш уҡырға тәҡдим ителгән 8-10 әҫәрҙе белеү. |
| 15 | 1 | 21.10 | | Айыухас менән Айыукәс. | |
| 16 | 1 | 23.10 | | Дағыстан халыҡ әкиәте.Батыр малай | |
| 17 | 1 | 6.11 | | З.Кускилдина .Сакырылмаған ҡунаҡ.Т/ү | |
| 18 | 1 | 11.11 | | Д.Талхина Күгәрсен күҙҙәре. | |
| 19 | 1 | 13.11 | | М.Пришвин. Аҡ муйынсаҡ. | |
| 20 | 1 | 18.11 | | Япон халыҡ әкиәте.Баҙлауыҡ | |
| 21 | 1 | 20.11 | | З.Кускилдина. Ай аҡылға ултыртты. | |
| 22 | 1 | 25.11 | | Рус халыҡ әкиәте.Төлкө менән кзә тәкәһе. | |
| 23 | 1 | 27.11 | | Йомғаҡлау дәресе.кластан тыш уҡыу. | |
| 24 | 1 | 2.12 | | Ф.Туғыҙбаева.Әсәйемдең ҡулы күп. | |
| 25 | 1 | 4.12 | | А.Докучаева.Көсөк. | |
| 26 | 1 | 9.12 | | А.Игебаев.Тыуған яҡ. | |
| 27 | 1 | 11.12 | | Башкорт милли аштары.С.Ғлүетдинов шиғырҙары. | |
| 28 | 1 | 16.12 | | Ф.Туғыҙбаева.Балыҡсы Айтуған бабай. | |
| 29 | 1 | 18.12 | | С.Маршак.Бесәйҙең өйө яна | |
| 30 | 1 | 23.12 | | Йомғаклау дәресеКластан тыш уҡыу | |
| 31 | 1 | 25.12 | | Б.Ноғманов.Урман китабы. | |
| 32 | 1 | 13.01 | | А.Игебаев.Урмансы малай. | |
| 33 | 1 | 15.01 | | Ғ.Ишбулатов.Шыкыйыусы,шәп йүгереүсе коштар Кластан тыш уҡыу. | |
| 34 | 1 | 20.01 | | Ф.Иҫәнғолов.Тыңлауһыҙ сана менән саңғылар | |
| 35 | 1 | 22.01 | | А.Йәғәфәрова.Сәнскеле күлдәк. | |
| 36 | 1 | 27.01 | | Ф.Фәтҡуллина.Карҙағы яҙыуҙар | |
| 37 | 1 | 29.01 | | Н.Игеҙйәнова. Тирәк | |
| 38 | 1 | 3.02 | | .Йомғаҡлау дәресе | |
| 39 | 1 | 5.02 | | Ф.Иҫәнғолов.Флүрәнең ғәйебе нимәлә | |
| 40 | 1 | 10.02 | | Ф.Фәтҡуллина.Ҡунаҡ табыны | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 41 | 1 | 12.02 | | С.Яҡупов.Кем маҡтансыҡ. | |
| 42 | 11 | 17.02 | | А.Йәғәфәрова.Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар | |
| 43 | 1 | 19.02 | | А.Йәғәфәрова.Дуҫғлыҡ менән шаярмайҙар | |
| 44 | 1 | 24.02 | | Г.Яҡупова.Рәхмәт яуғанда | |
| 45 | 1 | 26.02 | | Ф.Иҫәнголов.Батырҙар | |
| 46 | 1 | 3.03 | | Ф.Иҫәнголов.Ҡыҙҙар менән уйнарға яраймы | |
| 47 | 1 | 5.03 | | А.Толстой.Ҡандала. | |
| 48 | 1 | 10.03 | | З.Кускилдина.Ҡаскан әйберҙәр. | |
| 49 | 1 | 12.03 | | Ф.Иҫәнголов.Ғәбиттең сере нимәлә | |
| 50 | 1 | 17.03 | | Ф.Иҫәнголов.Һин ни эшләр инең. | |
| 51 | 1 | 19.03 | | Ф.Туғыҙбаева.Үсегеүсән бер малай. | |
| 52 | 1 | 31.03 | | Ф.Иҫәнғолов.Һин нимә тип яуап бирер инең. | |
| 53 | 1 | 2.04 | | Ж.Киекбаев.Оморҙаҡ бабай. | |
| 54 | 1 | 7.04 | | Йомгаклау.Әҙәп төбө-ғәҙәт. | |
| 55 | 1 | 9.04 | | Г.Ғәлиева.Мин йәшәйем Уралда. | |
| 56 | 1 | 14.04 | | Ф.Туғыҙбаева.Баш кала шундай матур. | |
| 57 | 1 | 16.04 | | Й.Солтанов.Өфө-беҙҙең баш калабыҙ. | |
| 58 | 1 | 21.04 | | М.Садикова.Тыуған яҡтарым һәйбйт. | |
| 59 | 1 | 23.04 | | З.Кускильдина.Өй туйы. | |
| 60 | 1 | 28.04 | | Тәбиғәттең нуры миңә күскән.В.Исхаков.Үгәй инә үләне. | |
| 61 | 1 | 30.04 | | Ф.Иҫәнголов.Өлгөргәнлек һынауы. | |
| 62 | 1 | 5.05 | | Р.Абуталипова.Уңған уң кул. | |
| 63 | 1 | 7.05 | | А.Ғарифуллина.Көтьөлмәгән осрашыу. | |
| 64 | 1 | 12.05 | | Н.Игеҙйәнова.Янгын. | |
| 65 | 1 | 14.05 | | Ә. Ихсан Әсә рәхмәте. | |
| 66 | 1 | 19.05 | | Г.Якупова. Ярғанат. ,. | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 67 | 1 | 19.05 | | Г.Ситдиҡова.Сер | |
| 68 | 1 | 21.05 | | Йомғаклау дәресе. | |

Дәреслек Әҙәби уҡыу 2 – се класс (2 өлөштә) .Авторҙары Дәүләтшина М.С., Сынбулатова Ф.Ш. Өфө: Китап, 2022.

Дәреслек Башҡорт теле 2-се класс   (2 өлөштә) Авторҙары Ф. Ш. Сынбулатова, Ы.Ә. Исмағолова. Өфө: Китап. 2022.
Эш дәфтәре. Башҡорт теле.  (2 өлөштә ). Авторҙары Ф.Ш. Сынбулатова. Өфө: Китап 2024